Башҡортостан Республикаһы Стәрлемамаҡ ҡалаһы Стәрлетамаҡ ҡала округы
“2-се гимназия”
муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы

**Туған (башҡорт) теленән**
**5-9-сы кластар өсөн**
**2023-2028 йылдарға**
**эш программаһы**
**(дөйөм белем биреү кимәле)**

Төҙөүсеһе
Арифуллина Н.М.,
туған тел уҡытыусыһы

Д.С. Тикеев, Х.А.Толомбаев, Ә. Х. Вилданов, М.С. Дәүләтшина., Ф.Ә. Хөснөтдинова, В.И. Хажиндың (Ижевск: «Книгоград», 2008) “Башҡорт теле һәм әҙәбиәте программаһы /уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-XI кластары өсөн” программаһына нигеҙләнеп төҙөлдө

2023 й.

**Аңлатма яҙыу**

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-9 -сы кластары өсөн туған (башҡорт) теленән эш программаһы түбәндәге документтарға нигеҙләнгән:
-Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм фән министрлығының 2010 йылдың 17 декабренән №1897 бойороғо менән раҫланған Федераль дәүләт белем биреү стандарттары;
-Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған Д.С. Тикеев, Х.А.Толомбаев, Ә. Х. Вилданов, М.С. Дәүләтшина., Ф.Ә. Хөснөтдинова, В.И. Хажиндың (Ижевск: «Книгоград», 2008) "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте программаһы /уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-XI кластары өсөн"
-"2-се гимназия" МАДББУ белем биреү программаһы.

**Уҡыу әсбаптары:**

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-се класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн дәреслек / Хажин В.И., Вилданов Ә.Х., Ф.Ә. Аҡҡужина, М.И.Ҡарабаев, З.Р.Әминева. – Өфө: Китап, 2020.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 6-сы класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн дәреслек / Хажин В.И., Вилданов Ә.Х., Ф.Ә. Аҡҡужина, М.И.Ҡарабаев, З.Р.Әминева. – Өфө: Китап, 2020.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте: Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-се класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн дәреслек / Хажин В.И., Вилданов Ә.Х., Ф.Ә. Аҡҡужина, М.И.Ҡарабаев, З.Р.Әминева. – Өфө: Китап, 2020.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте: Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8-се класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн дәреслек / Хажин В.И., Вилданов Ә.Х., Ф.Ә. Аҡҡужина, М.И.Ҡарабаев. – Өфө: Китап, 2020.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте: Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн дәреслек / Хажин В.И., Вилданов Ә.Х., Ф.Ә. Аҡҡужина, М.И.Ҡарабаев. – Өфө: Китап, 2020.

**Төп белем биреү программаһын үҙләштереүҙә планлаштырылған һөҙөмтәләр:**

**Предмет һөҙөмтәләре:**

Сығарылыш класс уҡыусыһы өйрәнәсәк:
-телмәр ситуацияһы менән идара итергә;
- һөйләү һәм яҙма телмәр ҡулланырға;
-монолог төрҙәрен (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү, төрлө төрҙәге монологтың берләшеүе) төрлө ситуацияла ҡулланырға;
- диалогик һәм монологик телмәрҙе айырырға;

-диалог төрҙәрен (этикет, диалог- һорашыу, диалог-фекер алышыу һ. б.; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүе) ҡулланырға;
- һөйләү һәм яҙма телмәрҙең төп үҙенсәлектәрен аңларға;
-һөйләү һәм яҙма телмәр өлгөләрен анализларға;
-формаль һәм формаль булмаған шәхес-ара аралашыуҙа телмәр тәртибе нормаларын үҙләштерергә;
-телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен: уҡыуҙы, аудированиены (тыңлауҙы), һөйләүҙе, яҙыуҙы аңлы ҡулланырға;
- текстағы төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте адекват ҡабул итергә;
-аралашыу ситуацияларына яраҡлы рәүештә тулы һәм ҡыҫҡартып уҡылған йә тыңланған текстың йөкмәткеһен бирергә;
- аудированиеның төрлө төрҙәрен (һайлау, танышыу, деталләү) үҙләштерергә;
-телдән һәм яҙма монологик, шулай уҡ маҡсатты, аралашыу ситуацияһын һәм сфераһын иҫәпкә алып, төрлө коммуникатив йүнәлешле телдән диалог төҙөргә;
- тема, коммуникатив күрһәтмә, текстың төп мәғәнәһен билдәләргә;
- текстың микротемаһын, текстың өлөштәренең һәм һөйләмдәренең бәйләнеш сараларын әйтә белергә;
- текстың коммуникатив-стилистик сараһы булараҡ абзацты билдәләргә, текстың планын төҙөргә;
- төрлө типтағы, стилдәге, жанрҙағы текстарҙы төҙөргә;
-телдең функциональ төрлөлөгө: һөйләү теле; функциональ стилдәр: фәнни, публицистик, рәсми, матур әҙәбиәт телен айыра белергә;
- һөйләү телмәренең, матур әҙәбиәт теленең һәм функциональ стилдәрҙең үҙенсәлектәрен табырға;
-кеше тормошонда коммуникатив белемдең мөһимлеген һәм йәмғиәт, дәүләт тормошонда башҡорт теленең ролен аңларға;
- башҡорт теленең килеп сығышын белергә, уның башҡа телдәр менән бәйләнештә булыуын күҙалларға;
-башҡорт теленең матурлығын, байлығын, тасуирилығын аңларға;
-телмәр ағымында өндәрҙең үҙгәрешен, фонетик транскрипцияның элементтарын билдәләргә;
- һүҙҙә өн функцияһының мәғәнәүи айырмалығына төшөнөргә.
- баҫымлы һәм баҫымһыҙ һуҙынҡыларҙы, яңғырау һәм һаңғырау, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы айырырға;
-һүҙҙәрҙең әйтелеш һәм яҙылыш үҙенсәлектәрен транскрипция элементтары ярҙамында аңлатырға;
- һүҙҙәргә фонетик анализ яһарға;
-һүҙгә лексик анализ яһарға;
-һүҙҙәрҙе тематик группаларға берләштерергә;
-һүҙҙәрҙең синоним, антонимдарын табырға;
-фразеологик берәмектәрҙе танырға;
- фекерҙе, хисте, эмоцияны белдереүҙә һүҙҙең мәғәнәһен аңларға; үҙ лексиконыңды киңәйтергә;
- лексик сараларҙы мәғәнә, сфера һәм аралашыу ситуацияһына яраҡлы ҡулланырға;
-төрлө һүҙлектәр менән ҡулланырға өйрәнергә;
-һүҙҙең лексик-грамматик разряды булараҡ һүҙ төркөмдәрен таный белергә;

- төрлө һүҙ төркөмдәренә ҡараған һүҙҙәргә морфологик анализ яһарға;
-хәҙерге башҡорт әҙәби теле нормаларына яраҡлы төрлө һүҙ төркөмдәренең һүҙҙәр формаһын ҡулланырға;
-морфологик белем һәм күнекмәләрҙе дөрөҫ яҙыу практикаһында ҡулланырға;
-телдең минималь мәғәнәүи берәмеге булараҡ морфеманы айыра белергә;
- аффикстың төрҙәре: һүҙ яһаусы, форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы таный белергә;
-лексик мәғәнәһен һәм яһалышын иҫәпкә алып, һүҙҙе морфемаларға бүлергә һәм анализ яһарға;
-һүҙлектәрҙе төрлө уҡыу мәсьәләләрен сисеүҙә ҡулланырға;
-синтаксистың берәмеге булараҡ һүҙбәйләнеш һәм һөйләмде таный белергә;
-синтаксик берәмек булараҡ һүҙбәйләнеш, һүҙбәйләнеш төрҙәрен телмәрҙә ҡуллана белергә;
-үҙ һәм икенсе кешенең телмәрен дөрөҫ һәм урынлы ҡулланырға;
-синтаксис буйынса белем һәм күнекмәләрҙе дөрөҫ яҙыу практикаһында ҡулланырға;
-синтаксик конструкцияларҙың төрлө стилдәге текстарҙа һәм төрлө функциональ телмәрҙә дөрөҫ ҡулланылыуын күҙәтергә;
-яҙма телмәрҙә орфографик һәм пунктуацион нормаларҙы күҙәтергә;
-орфографик һәм пунктуацион һиҙгерлекте булдырырға, хаталарҙы төҙәтергә;
-дөрөҫ яҙыу өсөн орфографик һүҙлектәр һәм белешмәләр ҡулланырға;
-башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрендә, матур әҙәбиәттә һәм тарихи текстарҙа милли-мәҙәни компонент мәғәнәһе менән тел берәмеген асырға;
- республиканың тарихи һәм мәҙәни традицияларын сағылдырыусы һүҙ һәм аңлатмаларҙың килеп сығышы тураһында белдермә әҙерләү өсөн этимологик һүҙлектәр һәм белешмәләр ҡулланырға;
-уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта башҡорт телмәр этикет ҡағиҙәләрен урынлы ҡулланырға;
-үҙ милләтен, Ватанын, тыуған яғын яратырға;
-этник һәм милли сағылышын танырға;
-атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға;
-ғаилә һәм йәмғиәт ҡиммәттәрен ихтирам итергә, үҙ аллы эшләү һәм үҙ эштәренә яуап бирергә әҙер булырға;
-ҡыҙыҡһыныусан, әүҙем булыу һәм донъяны танып белергә ынтылырға;
-әхлаҡ, социаль ғәҙеллек һәм ирек хаҡындағы ҡараштар нигеҙендә үҙ аллы үҫешкә һәләтле булырға;
-һәр саҡ этик тойғолар, ихтирамлылыҡ һәм эмоциональ- әхлаҡ һәм икенсе кешеләрҙең тойғоларын уртаҡлаша алырға.

*Сығарылыш класс укыусыһы өйрәнергә мөмкинлек ала:*
*-аудитория алдында  доклад менән сығыш яһарға; үҙенең рефератын, докладын тәкдим итергә; төрлө аргумент ҡулланып, бәхәстә ҡатнашырға;*
*-килеп тыуған ҡыйынлыктарҙы хәл итеүҙә ҡатнашыу, үҙ позицияңды дәлилләргә*
*-публицистик текстың мәғәнәһен аңларға;*
*-проблема буйынса төрлө сығанаҡтарҙан алынған яңылыктарҙы алырға, уларҙы хәл итеү буйынса үҙ фекереңде әйтә белергә;*
*-телдән монолог, диалог төрҙәрен ҡулланып һөйләшергә;*

*-телдән һәм яҙма рәүештә фәнни текстар төҙөргә, һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашырға;*
*-фонетик-орфоэпик белем һәм күнекмәләрҙе ҡулланырға;*
*-шиғри һәм проза әҫәрҙәрен тасуири уҡырға;*
*-кәрәкле информацияны морфемалар, һүҙьяһалыш, этимологик һүҙлектәрҙән алырға;*
*-үҙеңдең һәм сит кешенең телмәренең дөрөҫлөгөн баһалай белергә;*
*-һүҙлектәрҙән кәрәкле мәғлүмәтте ала белергә;*
*-морфологик белемде публицистика һәм матур әҙәбиәттә ҡуллана белергә;*
*-төп синтаксик конструкцияларҙы публицистик һәм әҙәби телмәрҙә таный белергә, уларҙы баһалай белергә;*
*-кәрәкле мәғлүмәтте орфографик һүҙлектәрҙән алырға; был мәғлүмәтте яҙыу процессында ҡулланырға;*
*-башҡорт телмәр этикетын башҡа телдәрҙең телмәр этикеты менән сағыштырырға;*
*-айырым миҫалдарға тел, мәҙәниәт һәм халыҡ тарихының берҙәм булыуын аңлатырға.*

**Шәхси һөҙөмтәләр:**

-донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү;
-үҙеңде илдең гражданины итеп тойоу;
-телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡ ҡабул итеү;
-башҡорт теле саралары ярҙамында (балалар фольклоры, балалар әҙәбиәтенең ҡайһы бер үрнәктәре) уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы.

**Метапредмет һөҙөмтәләре:**

***коммуникатив универсаль укыу эшмәкәрлеге***

- уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү;
-элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сараларын һайлау һәләтен үҫтереү;
- урта класс уҡыусыһының танып белеү һәм эмоциональ сфераларын үҫтереү;
- башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация булдырыу;
- уҡытыу-методик комплекстың төрлө компоненттары (дәреслек, аудиодиск һ.б.) менән эшләргә өйрәтеү.
-телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән эш итеү, тыңдаштәре һәм оло кешеләр менән аралашыуҙы ҡороу;
-телдән һәм яҙма телмәрҙе адекват ҡабул итеү,
-ҡуйылған проблема буйынса үҙ ҡарашыңды теүәл, дөрөҫ, логик яҡтан төҙөк һәм тасуири әйтеп биреү,
-аралашыу процесында яҙма һәм һөйләү телмәре нормаларын һәм башҡорт телмәр этикетын һаҡлау;

***танып белеү универсаль укыу эшмәкәрлеге***

-проблеманы анығлау, дөрөҫ аргументлай белеү,
-логик яҡтан төҙөк фекер йөрөтөү, иҫбатлай белеү, раҫлаусы йә кире ҡағыусы тезис килтереү,
-библиографик эҙләнеүҙе тормошҡа ашырыу,
-төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәт алыу, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте билдәләү,
-уҡыу маҡсатын асыҡлау, аралашыу маҡсатынан сығып уҡыу төрөн һайлау, мәғлүмәти-компьютер сараларын ҡулланыу;
-мәғлүмәтте системаға килтереү һәм киренән эшкәртеү, уны төрлө ысулдар менән күрһәтеү һ. б.**;**

***регулятив универсаль укыу эшмәкәрлеге***

-эшмәкәрлек маҡсатын ҡуя һәм аныҡ итеп әйтә белеү,
- эшмәкәрлекте эҙмә-эҙлекле планлаштыра һәм кәрәк саҡта үҙгәртә белеү;
- үҙ контроль, үҙ баһалау, үҙ коррекциялауҙы тормошҡа ашырыу
-үҙ аллы белем алыу, мәғлүмәт йыйыу һәм уларҙы ҡуллана белеү;

-дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләү;
-дәрескә маҡсат ҡуйыу һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тота белеү һәм тормошҡа ашырыу, эште дөрөҫ планлаштырыу, эҙләнеү эше алып барыу;
-эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентация эшләү.

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

**Тел.** Башҡорт әҙәби теле, уның нормалар системаһы. Башҡорт теле, уның тарихы, ҡәрҙәш төрки телдәр араһында урыны, уны өйрәнеүгә арналған ғилми хеҙмәттәр. Туған тел, уның ҡәҙере, әһәмиәте тураһында халыҡ ижады өлгөләре, әҙәби әҫәрҙәр.

**Фонетика һәм орфоэпия.** Өн һәм хәреф. Башҡорт теленең өндәр системаһы. Уларҙы белдергән хәрефтәр. Башҡорт теленең өндәр системаһын рус теленең өндәр системаһы менән сағыштырыу. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре, уларҙы белдергән хәрефтәр.

Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Һуҙынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелешен рус телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелеше менән сағыштырыу. Тартынҡы өндәр. Уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге тартынҡыларҙың әйтелешен рус телендәге тартынҡыларҙың әйтелеше менән сағыштырыу. Тартынҡы өндәрҙең үҙгәреше. Башҡорт телендә к-г, һ-х, н-ң,с-ҫ,з-ҙ тартынҡыларының дөрөҫ әйтелеше. Телмәр ағышында өндәрҙең бер-береһенә йоғонтоһо. Тартынҡы өндәрҙең үҙгәреше.

Башҡорт телендә *сингармонизм.* Сингармонизм төрҙәре.

*Башҡорт телендә ижектәр.* Ижектәрҙең төрҙәре. Башҡорт һәм рус телендәге ижектәрҙе сағыштырыу. Һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү ҡағиҙәләре.

*Башҡорт телендә баҫым,* уның үҙенсәлектәре, дөрөҫ ҡуйылышы. Баҫымыдың һуңғы ижекkә төшөүе һәм ялғау ҡушҡан һайын күсә барыуы. Башҡорт һүҙҙәрендәге һәм рус телен һуңғы осорҙа үҙләштергән һүҙҙәрҙәге баҫымды сағыштырыу.

**Лексика.**

Синоним тураһында төшөнсә.

Антоним тураһында төшөнсә.

Омоним тураһында төшөнсә.

Архаизмдар, неологизмдар, варваризмдар тураһында төшөнсә.

*Башҡорт теленең һүҙлек байлығы,* уның сығанаҡтары. Төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр. Бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәләре.

*Башҡорт телендә нығынған һүҙбәйләнештәр,* улар аңлатҡан мәғәнә. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙе һүҙҙәр менән сағыштырыу, алмаштырыу. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙең телмәрҙәге роле. Башҡорт һәм рус телендәге һүҙбәйләнештәрҙе сағыштырыу.

**Башҡорт һәм рус телдәрендә интонация** һәм уның төрҙәре: логик баҫым, пауза, фраза баҫымы, телмәр мелодикаһы, тойғо баҫымы.

**Һүҙьяһалыш.**

**Башҡорт телендә һүҙьяһалыш.** Һүҙ составы. Башҡорт теле – агглюнатив тел. Тамыр. Нигеҙ. Ялғауҙар. Ялғауҙарҙың һүҙ һәм төр яһаусы ялғауҙар, үҙгәртеүсе ялғауҙар. Ялғауҙарҙаң варианттары. Ялғауҙарҙың төрҙәре, дөрөҫ яҙылышы. Рус теленән үҙләштерелгән бер төркөм һүҙҙәрҙә ялғау ҡушҡанда һүҙ аҙағындағы тартынҡы өндөң төшөп ҡалыуы (август - авгусҡа), йәки, киреһенсә, һуҙынҡылар өҫтәлеүе (киоск - киоскыла). Ялғауҙар ҡушҡанда ҡайһы бер һүҙҙәрҙә өндәрҙең сиратлашыуы менән практик таныштырыу.

Башҡорт һәм рус телдәрендәге һүҙяһалыш юлдарын асыҡлау, уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһын билдәләү; тамыр һүҙ, яһалма һүҙ, ҡушма һүҙ. Башҡорт телендә ҡушма һүҙҙәрҙең ҡушыу, парлау, бәйләү, ҡабатлау, ҡыҫҡартыу юлы менән яһалышы.
Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Тамырҙа ялғау ҡушҡанда һүҙҙәрҙең мәғәнәһе үҙгәреүе.

Эш ҡағыҙҙары төрҙәре. Хат яҙыу.

**Морфология.**

Һүҙ төркөмдәре тураһында төшөнсә. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. *Исем.* Башҡорт телендә тик затты белдергән исемдәрҙең генә кем? һорауына яуап биреүе. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Яңғыҙлыҡ исмедәрҙең башҡортса һәм русса дөрөҫ яҙылышы, бәйләнешле телмәрҙә ҡулланышы. Исемдәрҙең һан, килеш, эйәлек һәм хәбәрлек категориялары менән үҙгәрешенең үҙенсәлектәре. Исемдәрҙең күплек категорияһы, уларҙың үҙенсәлект рус теленең күплек категорияһы менән сағыштырыу. Башҡорт телендә, рус теленән айырмалы рәүештә, бөтә исемдәрҙең дә күплек ялғауы ҡабул итә алыуы. Башҡорт телендәге күплек категорияһының индивидуаль күплекте (китаптар, ҡыҙҙар) һәм төркөмлө күплекте (ағайымдар, әсәйемдәр, йөрәккәйҙәрем) аңлатыуы. Башҡорт телендә, рус теленән айырмалы рәүештә, фәҡәт берлектә йәки күплектә генә ҡулланыла торған исемдәрҙең юҡлығы. Башҡорт телендә исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Башҡорт һәм рус телендәге килештәр системаһын сағыштырыу, уларҙың атамаларын, һорауҙарын асыҡлау. Килеш формаларының мәғәнәләре.

Башҡорт телендәге бәйләүесле һәм бәйләүесһеҙ ҡулланыусы килештәр, уларҙы рус телендәге предлогтар һәм предлогтарҙан башҡа ҡулланыусы килештәр менән сағыштырыу.

Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәреше, уларҙың мәғәнәләре. Эйәлек ялғауы ҡабул иткән исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше.

Исемдәрҙең хәбәрлек категорияһы, уның бирелеү юлдары.

*Сифат.* Һүҙ төркөмө булараҡ башҡорт телендә сифат, уның башҡорт һәм рус телдәрендәге үҙенсәлектәре. Сифаттарҙың дәрәжә менән үҙгәреше. Башҡорт телендә исем алдында килгән сифаттарҙың, рус теленән айырмалы рәүештә, һен, килеш, род категориялары менән үҙгәрмәүе. Башҡорт телендә исемдәрҙең сифат урынында килеүе. Башҡорт телендә сифаттарһың исемләшеү осраҡтары. Исемләшкән сифаттарҙың эйәлек заты, һан, килеш, хәбәрлек категориялары менән үҙгәрмәүе.

*Алмаш.* Уларҙың һүҙ төркөмө булараҡ төп үҙенсәлектәре. Рус телендәге алмаштар менән сағыштырыу. Алмаштарҙың башҡорт теле һәм рус телдәрендә мәғәнә үҙенсәлектәрен, төркөмсәләрен сағыштырыу, башҡа һүҙ төркөмдәренә ҡараған һүҙҙәрҙе алмаштырыу үҙенсәлектәре.

*Һан.* Һандарҙың яһалышы, төркөмсәләре. Ябай һәм ҡушма һандар. Цифрҙар менән яҙылған һандарҙы уҡыу һәм яҙыу. Ҡушма һандарҙың дөрөҫ яҙылышы. Башҡорт телендә исем алдында килеүсе һандарҙың үҙгәрелеүе. Рус теленән айырмалы рәүештә, башҡорт телендә ҡушма һандарҙың һуңғы һүҙенә генә ялғау ҡушылыуы.

*Һүҙ төркөмө булараҡ ҡылым.* Уның телмәрҙе ойоштороуҙағы роле. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. Ҡылымдарҙың эште, хәрәкәтте һәм хәлде, торошто белдереүен һорауҙар ҡуйыу юлы менән асыҡлау.

Ҡылымдарҙың затлы һәм затһыҙ, барлык-юҡлык формалары. Ҡылымдарҙың күләм һәм йүнәлеш категориялары менән практик таныштырыу күнегеүҙәре. Төп йүнәлештән башҡа ҡылым йүнәлештәренең айырым ялғауҙары булыуын күрһәтеү һәм башҡорт телендә биш йүнәлеш: төп йүнәлеш, ҡайтым йүнәлеше, төшөм йүнәлеше, йөкмәтеү йүнәлеше һәм уртаҡлыҡ йүнәлеше барлығын практик миҫалдарҙа күрһәтеү.

Ҡылымдарҙың затлы формаларының үҙенсәлектәрен: һан, зат, заман менән үҙгәрешен асыҡлау, уларҙы рус теленә тәржемә итеү күнегеүҙәрен эшләтеү.

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәләре, заман формалары, һан, зат менән үҙгәреше, ниндәй һөйләм киҫәге була алыуы.

Хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәһе, яһалышы, үҙгәреш.

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманы.

Киләсәк заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәһе, яһалышы, үҙгәреше.

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының эш ҡушыуҙы, бойороуҙы белдереүе, яһалышы, һан, зат менән үҙгәреше, барлыҡта йәки юҡлыҡта килеүе.

Теләк һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың яһалышы, мәғәнәһе, үҙгәреше.

Шарт һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың яһалышы, мәғәнәһе, үҙгәреше.

Ҡылымдарҙың затһыҙ формалары: сифат ҡылым, хәл ҡылым, исем ҡылым, уртаҡҡылым. Уларҙың зат, һан менән үҙгәрмәүе.

*Исем ҡылымда* ҡылымлыҡ билдәләре: барлыҡ - юҡлыҡ, ҡылым күләмдәре һәм йүнәлештәре ялғауҙарын ҡабул итә алыуы. Исемлек билдәләре: килеш, һан, эйәлек категориялары менән үҙгәреүе. Исем ҡылымдарҙың исемгә күсеүе. Исем ҡылымдарҙы рус теленә тәржемә итеү.

*Уртаҡ ҡылым,* унең мәғәнәһе, яһалышы, барлыҡ-юҡлыҡ менән үҙгәреше. Рус телендәге уртаҡҡылымдың башҡорт теленә төрлө ҡылым формалары менән тәржемә ителеү мөмкинлектәрен миҫалдарҙа күҙәтеү. Киреһенсә, башҡорт телендәге уртаҡҡылым рус теленә төрлө ҡылымдар менән тәржемә ителә алыуын практик эштәр үтәлешендә асыҡлау.

Башҡорт телендә уртаҡ ҡылымдарҙың икенсе бер ҡылымдарҙы асыҡлап килеүе ихтимал: бирешмәҫкә тырыша, күрергә теләй һ.б. Уртаҡ ҡылымдан һуң ярай, ярамай, тейеш, тейеш түгел, кәрәк, мөмкин модаль һүҙҙәре килеп, төрлө модаль мәғәнәләр белдерә алыуын практик күҙәтеү, уларҙы рус теленә тәржемә итеү.

*Сифат ҡылым,* унда бер үк ваҡытта сифатлыҡ һәм ҡылымлыҡ мәғәнәһенең булыуы, йәғни предметтың, заттың билдәһен унең эше, хәрәкәте буйынса белдереүе. Сифат ҡылымдың заман менән үҙгәреүе. Хәҙерге заман сифат ҡылымдың ике төрө, ябай һәм ҡушма формалары, менән практик таныштырыу, уларҙың барлыҡта йәки юҡлыҡта тора алыуы.

Үткән заман сифат ҡылым, унең яһалышы, барлыҡта, юҡлыкта килә алыуы. Киләсәк заман сифат ҡылым, унең яһалышы, төрҙәре, мәғәнәләре. Сифат ҡылымдарҙың исемләшеүе, был осраҡта исемдәргә хас категориялар менән үҙгәреүе. Рус теленән айырмалы рәүештә, башҡорт телендә исем алдында килеүсе сифат ҡылымдарҙың һан, эйәлек, килеш ялғауҙарнын ҡабул итмәүе. Исем ҡылым, унең эш, хәл һәм хәрәкәттең исемен атауы, яһалышы.

*Хәл ҡылым,* уларҙың яһалышы, мәғәнәләре, төрҙәре, үҙенсәлектәре. Хәл ҡылымдар процестың билдәһен белдереүҙәре менән рәүештәргә оҡшай, ә уларҙың барлыҡ-юҡлыҡ,

күләм, йүнәлеш ялғауҙары ҡабул итеүе - ҡылымлыҡ билдәләре. Хәл ҡылымдарҙың ҡулланышы һәм дөрөç яҙылышы.

Ҡылым төркөмсәләренең рус теленә тәржемә ителеү үҙенсәлектәрен практик эштәр башҡарғанда күҙәтеү, уларҙы тәржемә итеү күнекмәләрен үçтереү. Ҡылымдарҙы дөйөмләштереп кабатлау.

*Рәүештәр.* Уларҙың мәғәнәләре. Рәүеш төркөмсәләре: төп рәүештәр, ваҡыт рәүештәре, урын рәүештәре, оҡшатыу-сағыштырыу рәүештәре, күләм-дәрәжә рәүештәре, сәбәп-максат рәүештәре тураһында төшөнсә.

Рәүештәрҙең яһалышы: тамыр, яһалма, ҡушма рәүештәр. Дәрәжәләре. Рәүештәрҙеңтелмәрҙә ҡулланылышы.

*Теркәүестәр.* Уларҙың һөйләм киçәктәрен һәм ҡушма һөйләмдә ябай һөйләмдәрҙе бәйләп йөрөүе. Теркәүестәрҙең төркөмсәләре: теҙеү һәм эйәртеү теркәүестәре, уларҙың телмәрҙәгө ҡулланышын күҙәтеү.

Теркәүес һүҙҙәр: парлы һәм яңғыҙ теркәүес һүҙҙәр, уларҙың һөйләмдәрҙе һәм һөйләм киçәктәрен бәйләүе күрһәтеү алмаштары менән белдерелә, яңғыҙ теркәүес һүҙҙәр: һорау һәм күрһәтеү алмаштары менән белдерелгән парлы теркәүес һүҙҙәр.

Теркәүестәрҙең дөрөç яҙылышы, уларҙы телмәрҙә дөрөçҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.

*Бәйләүестәр.* Уларҙың эйәреүсе киçәк менән эйәртеүсе киçәкте, эйәрсән һөйләм менән баш һөйләм араһындағы бәйләнеште барлыҡҡа килтереүе. Бәйләүестәрҙең төркөмсәләре, мәғәнәләре. Уларҙың телмәрҙәге әһәмиәте. Синоним бәйләүестәрҙе ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.

Бәйләүестәрҙең килештәргә мөнәсәбәте: 1) исемдәрҙең төп килештә, ә алмаштарҙың эйәлек килештә килеүен талап итеүсе бәйләүестәр; 2) исемдәрҙең төбәү килешен талап итеүсе бәйләүестәр; 3) исемдәрҙең сығанаҡ килештә тороуын талап итеүсе бәйләүестәр.

*Киçәксәләр.* Уларҙың айырым һүҙгә йәки һөйләмгә ниндәй булһа ла мәғәнә төçмөрләнеше биреүсе ярҙамсы һүҙ булыуы тураһында төшенсә. Киçәксәләрҙең төркөмсәләре, уларҙың дөрөç яҙылышы, телмәрҙә дөрөçҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.

*Ымлыктар.* Уларҙың кешеләрҙең хис-тойғоһон, теләк-ынтылыштарын белдереүе. Ымлыҡ төрҙәре, телмәрҙәге әһәмиәте, дөрөç яҙылышы. Ымлыҡтарҙың яңы һүҙҙәр яһауҙа нигеҙ булыуы.

**Синтаксис.**

Ябай һөйләм синтаксисы һәм пунктуация. һүҙбәйләнеш һәм һөйләм.

Һүҙбәйләнештәр, уларҙың яһалышы һәм төҙөлөшө. Кушма һүҙ һәм һүҙбәйләнеш, уларҙың окшашлығы һәм айырмаһы. һүҙбәйләнештәр кәмендә ике үҙаллы һүҙҙән барлыкка килә, уларҙа эйәртеүсе һәм эйәреүсе киçәктәр була. Эйәртеүсе һүҙҙең ниңцәй һүҙ төркөмдәренән булыуына карап, һүҙбәйләнештәрҙең төркөмләнеүе.

һөйләмдә һүҙҙәр бәйләнеше: теҙмә һәм эйәртеүле бәйләнеш, уларҙы барлыкка килтереүсе саралар. Эйәртеүсе бәйләнештең төрҙәре: *ярашыу, башкарылыу, йәнәшәлек, һөйкәлеү, уларҙың үҙенсәлектәре,* рус теле менән окшашлығы һәм айырмаһы,

Башкорт телендә ярашыу бәйләнешенең рус телендәге ярашыу бәйләнешенән айырмаһы: *улар нилде (они пришли), аҡ ҡар (белый снег), ак кулдәк (белая рубашка), Аҡ диңгеҙ (Белое море)* һ.б

һөйләмдә һүҙ тәртибе. Логик баçым. Башҡорт телендә, рус теле менән сағыштырғанда, һөйләмдә һүҙҙәрҙең килеү тәртибенең үҙенсәлектәре: һүҙҙәрҙең ыңғай һәм кире

тәртибе, уның сәбәптәре. һөйләү максаты яғынан һөйләм төрҙәре: хәбәр, һорау һәм бойоок-өндәү, тойғо һөйләмдәр, уларҙың үҙенсәлектәре.

Һөйләмдең баш киҫәктәре.

Эйә һәм хәбәр. Эйә, уның төп килештә килеүе һәм башка һөйләм киҫәктәренә буйһонмауы. Эйәнең төп билдәләре һәм грамматик бирелеше, составы.

Хәбәр, уның эйә тураһында нимә булһа ла хәбәр итеүе һәм эйә менән бәйләнеп килеүе. Хәбәрҙең төп билдәләре, уның составы һәм бирелеше. Эйә менән хәбәрҙең килеү урыны. Эйә менән хәбәр араһында һыҙык.

һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.

Уларҙың баш киҫәктәрҙе асыклап, уға эйәреп килеүе, һөйләмдә бер эйәрсән киҫәкте икенселәре асыклап килеү осраҡтары.

Аныклаусылар, уларҙың бирелеше, һөйләмдә исем менән белдерелгән киҫәккә карауы. Аныклаусы һәм аныкланыусы һүҙ, улар араһында бәйләнеш саралары. Рус теле менән сағыштырғандағы үҙенсәлектәре. Башкорт телендә аныклаусының аныкланыусынан алда килеүе.

Тиң һәм тиң булмаған аныклаусылар. Тиң анытслаусыларҙың предметтарҙы, заттарҙы бер яктан ғына асыклауы. Тиң булмаған аныклаусыларҙың предметтарҙы, заттарҙы төрлө яктан асыклауы.

Өҫтәлмәлектәр, уларҙың үҙенсәлектәре. Эйәреүсе киҫәктән һуң килеп, уның мәғәнәһенә өҫтәмә аныклыҡ биреүе.

Тултырыусылар, уларҙың кылым менән белдерелгән һөйләм киҫәгенә карауы, исем һәм исемләшкән һүҙҙәрҙән килеүе. Тултырыусыларҙың үҙе эйәргән һүҙгә килеш ялғауҙары, бәйләүестәр һәм ярҙамсы исемдәр ярҙамында бәйләнеүе. Тура һәм ситләтелгән тултырыусылар.

Билдәле һәм билдәһеҙ тура тултырыусылар, уларҙы телмәрҙә кулланыу үҙенсәлектәре.

Хәлдәр. Уларҙың төрҙәре. Рәүеш хәле.

Урын хәле. Вакыт хәле. Уларҙың телмәрҙәге роле.

Максат хәле. Сәбәп хәле.

Күләм-дәрәжә хәле.

Шарт хәле. Кире хәл.

Хәлдәрҙең мәғәнәләре, үҙҙәре эйәргән һүҙҙәргә бәйләнеү саралары, бирелеше. Башкорт телендәге хәлдәрҙе рус телендәге хәлдәр менән сағыштырыу, уларҙың окшашлығы һәм үҙенсәлектәре.

Ябай һөйләм синтаксисы. Синтаксик анализ яһау күнекмәләре.

Тиң киҫәкле һөйләмдәр.

Тиң киҫәктәр тураһында төшөнсә, уларҙың һөйләмдә бер үк һүҙгә карауы, бер һорауға яуап биреүе. Һөйләмдең бөтә киҫәктәренең дә тиң була алыуы, уларҙың ябай һәм таркау төрҙәре. Тиң киҫәктәрҙең үҙ-ара теркәүесле һәм теркәүесһеҙ бәйләнеүе. Тиң киҫәктәрҙе бәйләүсе теркәүестәр йыйыу теркәүестәре, каршы куйыу теркәүестәре, бүлеү теркәүестәре. Тиң киҫәктәр эргәһендә тыныш билдәләре, дөйөмләштереүсе һүҙҙәр. Үларҙың тиң киҫәктәрҙе алмаштыра алыуы, тиң киҫәктәрҙән алда ла, һуң да килеүе, шуға бәйле тыныш билдәләренең куйылышы.

Ике составлы һөйләмдәр.

Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре: билдәле эйәле һөйләмдәр, билдәһеҙ эйәле һөйләмдәр, дөйөм эйәле һөйләмдәр, эйәһеҙ һөйләмдәр, атама һөйләмдәр. Тулы һәм кәм

һөйләмдәр. Һөйләм аңлаткан мәғәнәнең тулы асыклығы өсөн кәрәк булған киҫәктәрҙең һөйләмдә бирелеүе. Алдағы һөйләмдәрҙән йәки фекер ағышынан аңлашыла торған һүҙҙәрҙең еңел генә төшөп калыу мөмкинселеге. Тулы һәм кәм һөйләмдәрҙе рус телендәге шул төргә караған һөйләмдәр менән сағыштырыу. Ике һәм бер составлы, тулы һәм кәм һөйләмдәр.

Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре.

Айырымланыу тураһында төшөнсә. Телмәрҙә айырым мәғәнә төҫмөрләнешен биреү өсөн кайһы бер һөйләм киҫәгенең интонация менән айырым әйтелеүе, уның һөйләмдә һүҙҙәрҙең килеү тәртибенә мөнәсәбәте. Башкорт телендә аныклаусыларҙың айырымланыуы.

Өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы. Айырымланған эйәрсән киҫәктәр эргәһендә тыныш билдәләре.

Хәлдәрҙең айырымланыуы. Хәл әйтемдәре, уларзың айырымланыуы.

Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр.

Өндәш һүҙҙәр һәм улар эргәһендә тыныш билдәләре. Өндәш һүҙҙәрҙең телмәр төбәп әйтелгән затты, предметты белдереүе, уларҙың һөйләмдә килеү урыны, төп килештәге исем менән белдерелеүе, йыйнаҡ һәм тарҡау була алыуы, предметтарға төбәп өндәшеүҙең мәғәнә биҙәге.

Өндәш һүҙҙәрҙең һөйләмдә айырым әйтелеүе, һөйләмдең кайһы урынында килеүгә карап паузаларҙың үҙенсәлеге.

Өндәш һүҙҙәр эргәһендә өтөрҙөң, өндәү билдәләренең куйылышы.

Инеш һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, уларҙың һөйләмдәге уй-фекергә һөйләүсенең мөнәсәбәтен белдереүе, йыйнак һәм тарҡау була алыуы, өндәш һүҙҙәр менән сағыштырғанда уларҙы айырып әйткән паузаның кыҫкалығы. Инеш һүҙҙәрҙең, инеш һүҙбәйләнештәрҙең өтөр менән айырылыуы.

Инеш һөйләмдәр.

Телмәр авторының үҙ фекеренә карата мөнәсәбәтен төп һөйләм эсенә ингән айырым һөйләм менән белдереүе. Инеш һөйләмдәрҙең төп һөйләмдән өтөр, һыҙык һәм йәйәләр менән айырылыуы, уларҙың куйылыу осратсгары.

һөйләмдәге *эйе, юҡ, ярай, ярамай* һүҙ-һөйләмдәрҙең, инеш һүҙҙәр кеүек үк, һөйләүсенең һөйләмдәге уй-фекергә мөнәсәбәтен: раҫлауын, иьгкар итеүен - белдерәләр уларҙың һөйләмдә килеү урыны, тыныш билдәләре менән айырылыуы, кабатланып та килә алыуы.

Тура һәм ситләтелгән телмәр тураһында төшөнсә.

Тура телмәрҙең һәм автор һүҙҙәренең һөйләмдә урынлашыу тәртибе. Тура телмәрҙең бер формаһы буларак диалог. Тура һәм ситләтелгән телмәрҙең айырмаһы. Тура телмәрҙе ситләтелгән телмәрлә әйләндереү күнекмәләре. Бындай һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

**Ҡушма һөйләм синтаксисы һәм пунктуация.** Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә. Ҡушма һөйләм һәм уның төрҙәре.

Теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр. Теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Улар эргәһендәге тыныш билдәләре. Теҙмә ҡушма һөйләмдәге ябай һөйләмдәрҙе бәйләүсе теркәүестәр.

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр, улар тураһында төшөнсә. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙәге баш һәм эйәрсән һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең мәғәнә яғынан бүленеше. Эйәрсән һөйләмдең төрөн баш һөйләмдән сығып бирелгән һорау ярҙамында

билдәләү. Эйәрсән һөйләм баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙҙе асыҡлаһа, уның мәғәнәһен мөнәсәбәтле һүҙҙең ниндәй һөйләм киҫәге булыуҙан сығып билдәләү.

Эйәрсән эйә һөйләм, уның баш һөйләмдең эйәһе урынында килеүе, йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән эйәне асьгклауы, баш һөйләмгә бәйләнеү саралары, тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Рус теленә тәржемә ителеше.

Эйәрсән аныҡлаусы һөйләмдәр, уларҙың баш һөйләмдең аныҡлаусы урынында килеүе, йә баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән аныҡлаусыға ҡарауы, уларҙың баш һөйләмгә бәйләнеү саралары, тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Башҡорт телендәге эйәрсән аныҡлаусы һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итеү.

Эйәрсән тултырыусы һөйләм, уның баш һөйләмдең тултырыусыһы урынында килеүе, йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән тултырыусыға ҡарауы, баш һөйләмгә бәйләнеү саралары, тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Башҡорт телендәге эйәрсән тултырыусы һөйләмдәрҙең рус теленә тәржемә ителеү мөмкинселектәре.

Эйәрсән хәл һөйләмдәр.

Эйәрсән ваҡыт һөйләм, уның баш һөйләмдең ваҡыт хәле урынында килеүе, йә баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән ваҡыт хәлен асыҡлауы. Ваҡыт һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Рус теленә тәржемә ителеше.

Эйәрсән урын һөйләм, уның баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән урын хәлен асыҡлауы, йә баш һөйләмдәге урын хәле урынында килеүе. Урын һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Башҡорт телендәге урын һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итеү.

Эйәрсән рәүеш һөйләмдәр улар баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән рәүеш хәлен асыҡлайҙар, йә баш һөйләмдең рәүеш хәле урынында киләләр. Эйәрсән рәүеш һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Эйәрсән рәүеш һөйләмле эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итеү.

Эйәрсән сәбәп һөйләм, уның баш һөйләмдең сәбәп хәле урынында килеүе, йә баш һөйләмдә мөнәсәбәт һүҙе менәнбирелгән сәбәп хәлен асыҡлауы. Эйәрсән сәбәп һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Эйәрсән маҡсат һөйләм, уның баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән маҡсат хәлен асыҡлауы, йә баш һөйләмдәге маҡсат хәле урынында килеүе. Эйәрсән маҡсат һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Башҡорт телендәге эйәрсән маҡсат һөйләмдәрҙең рус теленә тәржемә ителеү мөмкинселектәре.

Эйәрсән күләм-дәрәжә һөйләм, уның баш һөйләмдә күләм-дәрәжә хәле урынында килеүе, йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән күләм-дәрәжә хәлен асыҡлауы. Эйәрсән күләм-дәрәжә һөйләмен баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, баш һөйләм менән эйәрсән һөйләм араһындағы тыныш билдәләре.

Эйәрсән шарт һөйләм, уның баш һөйләмдәге шарт хәле урынында килеүе, йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән күләм-шарт хәленә ҡарауы. Эйәрсән шарт һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Эйәрсән кире һөйләм, уның баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән кире хәлгә ҡарауы, йә баш һөйләмдәге кире хәл урынында килеүе. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр тураһында төшөнсә: тиң эйәрсән һөйләмле һәм тиң булмаған эйәрсән һөйләмле, күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр, уларҙағы тыныш билдәләре.

Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. Уларҙың икенән артыҡ ябай һөйләмдәрҙән тороуы. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙең төрҙәре. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр тураһында төшөнсә, улар составындағы ябай һөйләмдәрҙең үҙ-ара теҙмә юл менән дә, эйәртеүле юл менән дә бәйләнеүе, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Теҙемдәр, уларҙың йә тиң киҫәктәре, йә тиң һөйләмдәре күп булыуы һөҙөмтәһендә ҡатмарландырылған ябай йәки ҡушма һөйләм булыуы. Теҙемдәрҙең төрө, төҙөлөшө, уларҙың составында һанау һәм йомғаҡлау бүлеген барлыҡҡа килтереүсе конструкцияларҙың булыуы, һанау һәм йомғаҡлау бүлегенең ҡайҙа килеүенә ҡарап, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Һөйләм аҙағындағы тыныш билдәләре: нөктә, һорау һәм өндәү билдәләренең ҡуйылыу осраҡтары. Өтөр һәм уның ҡуйылыу осраҡтары: ябай һөйләмдәрҙә һәм ҡушма һөйләмдәрҙә өтөрҙәрҙең ҡуйылышы.

Һыҙыҡ, уның ҡуйылыу осраҡтары: ябай һөйләмдәрҙә һәм ҡушма һөйләмдәрҙә һыҙыҡтың ҡуйылышы. Нөктәле өтөр, уның ябай һөйләмдәрҙә һәм кушма һөйләмдәрҙә куйылыу осраҡтары.

Ике нөктәнең куйылыу осрактары: ябай һөйләмдәрҙә, кушма һөйләмдәрҙә, тура телмәрле һөйләмдәрҙә ике нөктәнең ҡуйылышы.

Йәйәләр һәм тырнаҡтарҙың куйылыу осрактары

Конспект һәм тезис тураһында башланғыс мәғлүмәт биреү. Эш ҡағыҙҙары төҙөү буйынса эштәрҙе дауам итеү: хат, ғариза, белешмә, расписка, акт һәм протоколдар яҙа алыу күнекмәләрен үҫтереү.

**Һәр теманы үҙләштереүгә бүленгән сәғәт һанын күрһәтеп төҙөлгән тематик план.**

| Раздел | Класс / количество часов | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| Тел | 3 | 2 | | | |
| Фонетика һәм орфоэпия | 13 | | | | |
| Лексика | 8 | | | | |
| Фразеологик берәмектәр | 5 | | | | |
| Һүҙьяһалыш | 5 | | | | |
| Морфология | | 32 | 34 | | |
| Ябай һөйләм синтаксисы һәм пунктуация. | | | | 34 | 1 |
| Ҡушма һөйләм синтаксисы һәм пунктуация | | | | | 33 |